1-се сирек өсөн контроль диктант текстары

3-сө класс Контроль диктант.

Ҡоштарҙы һаҡлағыҙ!

Башҡортостанда ҡыш биш ай тиерлек дауам итә.Ҡыш көнө ҡоштар бик асығалар һәм һыуыҡтан интегәләр. Ас ҡош ныҡыраҡ өшөй.Ҡышын күп ҡоштарға аҙыҡ табыу ауырлаша. Балалар һәм ололар ҡоштарҙы ашаталар.(30 һүҙ).

Грамматик эш.

Текстағы нимә? тигән һорауға яуап биргән һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙырға.

4-се класс Контроль диктант.

Көҙ биҙәктәре.

Көҙөн баҫыуҙар бушап ҡала. Туңға һөрөлгән ерҙәр ҡараҡусҡыл булып күренә.Улар араһында йәшел диңгеҙ кеүек арыш баҫыуы йәйрәп ята. Киң ҡырҙар һәм тауҙарҙағы урман яланғасланған.Урман тынып ҡалған. Ҡоштар ҙа һайрамай.

Көҙгө көн үҙгәреп кенә тора.Әле ҡар яуып ебәрә.Әле ҡояш ялтырай. Әле ямғыр һибәләй. Матур ҙа һуң көҙ биҙәктәре!

Грамматик эш.

1.Беренсе һөйләмдәге һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлергә.

2. Бер һорау һөйләм уйлап яҙырға.

Фекерләү һәләтен үҫтереүгә текст

Дуҫтар.

Төҙөүсе ағайҙар һәм апайҙар урамда биш ҡатлы бик матур йорт төҙөнөләр. Шул матур йорттоң беренсе подъезына өс малай, өс ҡыҙ күсеп килде. Улар, бик тиҙ танышып, дуҫлашып киттеләр. Ҡыш көндәрендә лә, яҙ көндәрендә лә, йәй көндәрендә лә гел бергә уйнап үткәрҙеләр.

Бирем №1.
Өҙөктө уҡып сыҡ. Күсереп яҙ.
Бирем №2
Һорауҙарға яуап бир.
*Балалар ҡайһы йыл миҙгелендә бергә уйнағандар?
---
*Төҙөлгән йорт нисә ҡатлы? ----------
*Тағы был йортҡа ике ҡат өҫтәһәләр, йорт нисә ҡатлы була? --------
*Барлығы нисә бала күсеп килгән. ----------
Бирем №3
Балаларға исем ҡуш. Беренсе баҡанаға малай исемдәре, икенсе баҡанаға ҡыҙ исемдәре яҙ.

_____ _____
_____ _____
_____ _____

Бирем №4.
Һүҙҙәрҙе ижектәргә бүл.
төҙөүсе апайҙар килде
Бирем №5.
Һуҙынҡыларҙың аҫтына һыҙ.
йорт үткәрҙеләр
Бирем №6
Яңғырау тартынҡыларға һыҙ.
биш матур
Бирем №7.
Артыҡ һүҙҙе түңәрәккә ал.

ҡыҙ малай Ҡыш

Бирем №8.
Һүҙҙәрҙе руссаға тәржемә ит.
Төҙөүсе,ҡыш, бик матур.